*Әнүәр РӘХИМОВ,*
*лицей-интернат директоры*

# КИЛӘСӘК ӨСӨН

Башҡортостан Министрҙар Кабинетының 1996 йылдың 15 июнендәге ҡарары менән төньяҡ-көнсығыш райондарҙағы етем һәм ауыр ғаиләләрҙән сыҡҡан балалар өсөн Мәсәғүт ауылында Республика мәктәп-интернаты асылғайны. Мәктәп-интернат элекке 117-се ауыл профтехучилищеһы бинаһында урынлаша. Тәүге уҡыу йылында 200 бала булып, улар менән 16 тәрбиәсе, 30 уҡытыусы эшләне. Интернат өс бинала урынлашҡан: 2 дөйөм ятаҡ, 1 уҡыу бинаһы. Бынан тыш махсуслаштырылған оҫтаханалар эшләй.

1999—2000 уҡыу йылында 380 бала булып, шуларҙың 287-һе дөйөм ятаҡта йәшәй. 1998-99 уҡыу йылында урындағы балалар өсөн әҙерлек класы асып, «Алтын асҡыс» балалар баҡсаһын шефҡа алдыҡ. Был балалар баҡсаһы 1997 йылда район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ҡарары менән Мә-

сәғүттә беренсе башҡорт балалар баҡсаһы булып әүерелгәйне. Хәҙер ундағы 1-2-се синыфта уҡыған 34 бала беҙҙә шөғөлләнә. Һөҙөмтәлә район үҙәгендә йәшәгән башҡорт балалары әсә телендә уҡыу мөмкинселеге алды. Быға тиклем улар башҡорт телен 3 сәғәтлек программа буйынса ғына өйрәнәләр ине.

Быйылғы уҡыу йылында тәрбиәләнгән 380 баланың 20-һе үкһеҙ етем, 21-е — әсәйһеҙ, 83-ө — атайһыҙ, 178 уҡыусы күп балалы ғаиләнән. Улар менән 25 тәрбиәсе, 43 уҡытыусы эшләй.

Интернаттың матди-техник базаһын нығытыу буйынса ҙур эштәр алып барыла. Дөйөм ятаҡтарҙың, уҡыу корпусының һәм мастерской биналарының ҡыйыҡтары алмаштырылды, һыу йылытыу системаларына капиталь ремонт үткәрелде. Кабинеттар йыһазландырыла, яңы компьютер класы астыҡ. Өсөнсө йыл мәктәп ихатаһын, уның тирә-яғын йәшелләндереү буйынса эштәр алып барыла. Мәктәптең үҙенең 1,5 гектар йәшелсә баҡсаһы булып, ашханабыҙҙы йыл әйләнәһенә етерлек йәшелсә менән тәьмин итәбеҙ. Уҙған йыл 70 мең һумлыҡ йәшелсә үҫтереп алдыҡ. Бында, әлбиттә, баҡсасы Әлфирә Хәйбулла ҡыҙы Калининаның хеҙмәт өлөшө бик ҙур. Яланда 60 гектар еребеҙ бар. Унда бойҙай, ҡарабойҙай, бәрәңге үҫтерәбеҙ. 1999 йылда ғына ҡарабойҙайҙан 100 мең һумлыҡ килем алдыҡ. 40 баш умартабыҙ бар. Ошо ярҙамсы хужалыҡтарҙың килемдәрен йыйып, интернатҡа яңы автобус һатып алдыҡ.

Ике йыл элек мәктәп-интернат лицейға әүерелде. Лицей синыфтарында гуманитар фәндәр, математика, физика фәндәре, химия-биология фәндәре төркөмләп тәрән уҡытыла. Бынан тыш, БДУ, Бөрө педагогия институты, БДПУ менән килешеүҙәр төҙөлөп, абитуриенттар өсөн махсус әҙерлек лекциялары уҡытыла. Был, әлбиттә, юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн ҙур ярҙам булып тора. Дөйөм белем алыу менән бергә, сығарылыш синыф уҡыусылары умартасы, парикмахер, шофер, тегенсе һөнәрҙәренә эйә булыуҙарына танытма алып сығалар.

Тәрбиә эштәренә килгәндә, уҡыусыларҙың дәрестәрҙән һуң үҙе теләгән, ятаҡан түңәрәктәргә йөрөү мөмкинлеге бар. Әлеге көндә интернатта 17 түңәрәк эшләп, уларҙа 278 бала шөғөлләнә.

Интернаттың дүртенсе йыл ғына эшләүенә ҡарамаҫтан, уңыштарыбыҙ етерлек. Мәҫәлән, тәүге уҡыу йылынан алып район буйынса үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһында беҙҙең уҡыусылар уҡытыусылары Флорида Кашаф ҡыҙы Мөхәмәтғәлина етәкселегендә бер-нисә тапҡыр 1-се урын яуланы һәм республика олимпиадаһында уңышлы сығыш яһаны.

Спорт өлкәһендә лә беҙҙең уҡыусылар һынатмай. Көрәш буйынса район кимәлендә генә түгел, республика буйынса ярыштарҙа ла 1-се һәм 2-се урындарҙы яулай улар.

Сәнғәт менән шөғөлләнергә лә интернатта бөтә шарттар булдырылған. Бейеү, ҡурай, ҡумыҙ түңәрәктәренә уҡыусылар шатланып йөрөй. Бейеүселәр өсөн төрлө костюмдар, ҡурай, ҡумыҙ уйнаусыларға музыка ҡоралдары һатып алдыҡ. Беҙҙең йәш артистарыбыҙҙы һәр ерҙә көтөп алалар, алҡыштарға күмеп оҙаталар. Уҡытыусылар коллективында ла сәнғәткә ғашиҡ кешеләр эшләй. Быйыл районда хеҙмәт ойошмалары араһында үткәрелгән үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәгендә ҡатнашыусыларҙың Еңеүҙең 55 йылына арналған смотр-конкурсында Гран-приға лайыҡ булдыҡ.

Әлеге көндә беҙҙең коллектив мәктәп музейын асыу буйынса ҙур эш алып бара. Унда төньяҡ-көнсығыш райондарҙың геройҙары, мәҙәниәт, сәнғәт, фән эшмәкәрҙәре тураһында, ауылдар, райондар тарихын сағылдырған материалдар туплана.

Киләсәктә беҙҙең лицей-интернат Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәгендә йәшәгән башҡорт рухлы йәш быуынды — республикабыҙҙың яңы граждандарын тәрбиәләүсе алдынғы уҡыу йорттарының береһе буласағына ышанабыҙ. Ошо дүрт йыл эсендә күп нәмә эшләнде, ә эшләнәһе эштәр тағы ла күберәк.